*Рафаэль АҘНАҒОЛОВ*

# Тәрән мәғәнәле ижад

Абруйлы яҙыусы, күркәм һүҙ сәнғәтенең таныҡлы ҡәләм оҫтаһы, тәрән мәғәнәле ижадсы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Таңсулпан Ғарипова хаҡында күп һөйләргә мөмкин. Уның ижады, бигерәк тә биш романды берләштергән "Бөйрәкәй" әҫәре (пенталогия) тураһында төрлө һүҙҙәр ишетелгеләне. Тормошта үҙенсәлекле сағыу ижадты төрлөсә баһалаусылар бар. Ҙур талант эйәһенең юлына заман бер ҡасан да фарсы келәмдәрен түшәп ҡуймаған. Ижадың төрлө фекер тыуҙыра икән, тимәк, һин — ҙур ижадсы. Әгәр һинең ижадыңа битараф булһалар, ҡәләмеңдең көсө лә самалы тигәнде аңлатыр ине.

Таңсулпан Ғарипованың ҡайһы бер хикәйәләре, "Ай менән ҡояш бер генә" повесы, "Бөйрәкәй" роман-эпопеяһы хаҡында ҡайһы бер фекерҙәремде үҙемдең мәҡәләләремдә әйткәйнем инде. Был яҙмамда уның драма әҫәрҙәре тураһында һүҙ алып бармаҡсымын.

Таңсулпан драматург сүрәтендә бөтөнләй икенсе тауышта, икенсе интонацияла, стилдә, икенсе асылда күҙ алдына баҫа. Уның "Ямғыр көткәндә", "Тәңкәле ҡыҙ", "Бәхеткә ҡасҡандар", "Китмәгеҙ, торналар!" "Төштәге йыр" һәм башҡа драмаларын Сибай, Стәрлетамаҡ театрҙары сәхнәләштерҙе. Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры тиҙҙән Т.Ғарипованың "Урал батыр" пьесаһын сәхнәгә сығармаҡсы икән. Тимәк, театр коллективы ысын ижадты баһалай белә.

Үҙ тамашасылары алдында Таңсулпан-драматургка ла бәхетле яҙмыш кисерергә яҙған. Театр мөхитендә балҡышлы алҡыштар сәхнә әҫәрен ғүмерле итә, авторҙың да был жанрҙа ҡанаттарын нығыта. Матбуғатта уның сәхнә донъяһына сыҡҡан, үҙ урынын тотороҡло яулаған драмалары тураһында йыш яҙҙылар. Тимәк, әҙибә был өлкәлә лә иғтибарҙан мәхрүм түгел. Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүҙең ун йыллығына арналған пьесалар конкурсында уның "Бәхеткә ҡасҡандар" драмаһы беренсе урынды яуланы. Был инде әҙибәнең абруйын дәүләтебеҙ кимәленә күтәрҙе. Ә инде "Йәй ташы" драмаһы буйынса "Сөмбөлдөң етенсе йәйе" тигән нәфис фильм төшөрөлгән икән, яҙыусының ижады тотош илде айҡай, башҡорт сәнғәтенең данын күтәрә тигән һүҙ. Әҙибәнең драматургияла ең һыҙғанып эшләүенә мин аптырамайым. Уның пьесаларына ла тәрән мәғәнә, образлы фекер, тәбиғи телмәр менән һүрәтләү хас.

Талҡаҫта йыл аша үткәрелеп килгән драматургтар семинарында ҡатнашҡан Мәскәүҙең Сатира театрының художество етәксеһе Петр Орлов телетапшырыуҙарҙың береһендә: ”Беҙ йылына ике меңләп пьеса уҡыйбыҙ, ә бына Ғарипова әҫәрҙәре кеүек халыҡтың рухи ҡимммәттәрен күтәреп сыҡҡан пьесалар юҡ”, — тигәйне.

Таңсулпандың драмалары халыҡтың ғәҙәти йәшәү рәүешен, образдарҙың был фани донъя күренештәренә тәнҡитсел мөнәсәбәтен, тәрән мәғәнәле, уйландырырлыҡ телмәр сараларын сағылдыра. Ана шул рухи ҡимммәттәрҙең ҡайһы берҙәрен драматургтың ”Ғилмияза” пьесаһынан эҙләп ҡарамаҡсымын.

”Ғилмияза”лағы күңел моңон, поэтикаһын, аҡыл һәм аң синтезынан барлыҡҡа килтергән телмәрҙең ынйыларын тулҡынланмайынса уҡыу, тойоу, кисереү мөмкин түгел. Әлбиттә, Таңсулпандың телмәр ҡеҙрәтендә, поэтик моңонда атай-өләсәйҙәренең дә өлөшө барҙыр. Әммә һүҙ асылының күбеһе тыуған төйәгендәге халыҡтан, халыҡ телмәренән алынғандыр. Әҫәргә күҙ һалайыҡ:

”Б и к б а у. Мин күтәрә алмаған йөк, мин эшләй алмаған эш юҡ донъяла, сибәркәй! Теләйһеңме, анау өйөрҙәге аҫау айғырға һә тигәнсә йүгән кейҙерәм? Теләһәң, бынау имәнде...

Ғ и л м и я з а. Беләк менән түгел, йөрәк менән күтәрә торған йөктәр бар, ағай.

Б и к б а у. Һин мине таныманың, ахыры, ҡыҙыҡай. Исемем — Бикбау. Дарманға ла, дәрткә лә булмышым бай!

Ғ и л м и я з а. Мин таныным һине, бей ағай! Әммә бейҙәрҙең дә хәленән килмәҫ өсәү бар: ташҡынға йүгән кейҙереү, рухҡа бығау һалыу, ҡандан һыуһын яһау мөмкин түгел, ағай!”

Был репликаға, телмәргә өс кимәлдән, өс юҫыҡтан сығып анализ биреп була. Беренсеһе — ир менен ҡыҙ араһындағы ғәҙәти һөйләшеү: ирҙә — көс, ҡыҙҙа аҡыл бар. Икенсеһе — дәрәжәле кеше менән сәсәнйырсының һөйләшеүе: ирҙә — власть, ҡыҙҙа шул власты табындырырлыҡ наҙ бар. Өсөнсөһө — батырлыҡ менән һылыулыҡтың һөйләшеүе: батырлыҡ — тәбиғи түгел, ҡулындағы власть ҡына ирҙе батыр итә алмай, һылыулыҡтың тәбиғилеге, аҡыллы һылыулыҡ һәр нәмәнән ҡеҙрәтле. Шулай уҡ бында бәғерһеҙлек (Бикбау аҡҡошто атып төшөрә) менән кешелеклелек мәғәнәләрен дә өҫтәһәк, ул замандағы социаль тиңһеҙлектең асылын аңларға булалыр. Өҫтәп шуны ла әйтергә кәрәк: халыҡ аҡылының байлығы, тапҡырлығы, зирәклеге Ғилмияза образында һынландырылған.

Әйтәйек, йөрәк менән күтәрә торған йөктәргә мөхәббәтте, һөйөүһөйөлөүҙе, моңдо, рухты, батырлыҡты, ватансылыҡты — илаһи булмышты индереп булалыр. ”Ташҡынға йүгән кейҙереү мөмкин түгел” тигәненән илдең азатлығы өсөн көрәште күҙ уңында тотоу кәрәктер. ”Рухҡа бығау һалыу мөмкин түгел” тигән афоризмы ла уйландыра. Әгәр рухты йән итеп ҡараһаҡ, ысынлап та, тәнгә бығау һалып була, ә йәнде (күҙгә күренмәгән ысынбарлыҡты) бығаулау — мөмкин булмаған хәл. Инде лә килеп, ”ҡандан һыуһын яһау мөмкин түгел” тигән мәғәнәгә иғтибар итәйек. Халыҡ хәтере — эпоста. ”Урал батыр”ҙа ла шундай юлдар бар:

Йыртҡыс йәнлекте тотһа,
Йәнлек орғасы булһа,
Ирле-бисә икәүһе
Йөрәгене һайлаған,
Үлән емшер йән тотһа,
Ҡара һөлөк ҡаҙаған,
Һөлөгөнән һурҙырып,
Ҡандан һыуһын яһаған.
Бала үҫеп еткәнсе,
Үҙе йәнлек тотҡансы,
Баш-йөрәкте ашауҙан,
Һыуһынға ҡан эсеүҙән
Уландарын тыйғандар.

Ғилмияза Бикбау бейгә: "Ҡандан һыуһын яһау мөмкин түгел", — ти. Тимәк, бында икенсе бер ҙур мәғәнә һалынған булырға тейеш. Был хаҡта ла ҡарашымды әйтеп үтәйем. Халыҡта *канға һыуһау, каның эскер, кан көҫәү* тигән әйтемдәр бар. Былар барыһы ла яуыз, йыртҡыс кешегә ҡарата әйтелгән. Үҙ азатлығы өсөн көрәштә аҡкан халыҡ ҡаны — изге. Ул тәңребеҙ тип табынған заттан да өҫтөн, бөйөк булған. *Ҡан кәрҙәштәр* тигән һүҙҙе лә онотмайыҡ. Халыҡ ҡанынан һыуһын яһау — вәхшилек. Ғилмияза ырыуҙаштары араһында юҡ-барға ыҙғыш-талаш сығарып, ҡан ҡойоуҙы Бикбау бейгә төшөндөрөргә тырышҡан. Тимәк, ул ырыу-ара берҙәмлеккә, татыулыҡҡа өндәгән.

Таңсулпан Ғарипова: "Ғилмияза" драмаһы легендаға таянып яҙылды", — ти. Әммә автор шул осор ваҡиғаһын үҙенсә күҙаллап, үҙенсә өлгө тыуҙыра алған. Шул осорҙағы башҡорттарҙың илгә, донъяға мөнәсәбәтен, йәшәү рәүешен, ил хакимдарының үтә лә тарҡаулығын (быны беҙ Иҫке бей менән Бикбау бей миҫалында ла асыҡ күрәбеҙ) бөтә дөрөҫлөгөндә сағылдырған. Шуға ла драманың әһәмиәте, мәғәнәһе бик ҙур.

Әҫәрҙә төп образ — халыҡ. Уның сәсән, ижадсы, йырсы булыуы Ғилмияза образы аша күрһәтелә. Шул замандарҙа ҡатын-ҡыҙ араһынан сыҡҡан көслө шәхес ул Ғилмияза. Көслө, тинем, сөнки Иҫке бей: "Йәмәғәт! Ҡайһы ырыу көслө, ханды шул ҡуя, ҡайһы ырыу үсле — ҡанды шул ҡоя! Уҙамандар!.." — тип әйтә, әммә ул ил оранын, бөрйәндәр оранын әйтмәй ҡала. Әгәр оран Иҫке бей ауыҙынан яңғыраһа, ике ырыу араһында ҡан ҡойош китә ине. Шул саҡ Ғилмияза, һүҙ һорап, халыҡтың ығы-зығыһын юҡҡа сығара. Әҫәргә күҙ һалайыҡ:

"Ғ и л м и я з а (төркөмдән айырылып, ҡаяға үрләй башлай). Туҡтағыҙ! Мине тыңлағыҙ! Халҡым! Ҡарыу йырҙарымда алдашманым. Хәҙер күрәм: аҡкош йырын һеҙгә еткерергә ваҡыт етте. Йырымдың һүҙҙәре ҡаҙаҡ далаларынан Уралыма килеп еткәнсе табанымдан һарҡкан ал ҡан менән сал сәсле ҡылған баштарына яҙылды; моңо, ишенән яҙған аҡкоштоң һуңғы иңрәүе булып, күкрәгемде йыртып сыҡты. Илемде һәм халҡымды, Күгемде һәм Еремде яратыуымдың билгеһе итеп, был йырымды һеҙгә ҡалдырам!

Һаҡмар ғына аға төшкә табан,
Урал тауы ята көн битләп.
Үҙ илкәйҙәремә ҡайтыр ҙа инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп...

Халыҡ йыр ҡөҙрәтенә шаңҡып торған арала Ғилмияза ҡаянан айырыла.

Х а л ы ҡ. Аһ!

И с м ә ғ и л. Балам!

Б и к б а у. Ғилмияза!

Һауала аҡҡош мамығын хәтерләткән ҡаурыйҙар оса. Тауҙар Ғилмиязаның йырын ҡабатлағандай:

”Үҙ илкәйҙәремә ҡайтыр ҙа инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп...”

Тау шаңдауы булып, Ғилмиязаның хушлашыу йыры, быуаттар үтһә лә, һаман да ҡолаҡта яңғырай. Ана шул йыры, ҡабатланмаҫ моңо менән ике ырыу халҡын ҡан ҡойоштан һаҡлап алып ҡала. Ике ырыу халҡының тыныслығы өсөн йәнен ҡаянан атып бәрә. Ул — реаль шәхес. Ир-атҡа алмаштырғыһыҙ ҡаһарман сәсән, моңсо сәсән.

Беҙҙең тау-ҡаяларыбыҙға күпме тарих яҙылып, моңдарыбыҙ таштарына һеңеп ҡалған. Быуаттар төпкөлөндәге тарих туҙандарын ҡағып, саңынан арындырып, үҙебеҙҙең этномәҙәни мираҫыбыҙға әҙәмсәлек күрһәтеү кәрәктер.

Драманың прологында Бикбау бей, төйләгәнгә атам, тип, аҡҡошто атып үлтерә. Башҡорттарҙың йола-ҡанундарында, аҡҡошто атһаң, илгә бәлә-ҡаза килә, тип әйтелә. Тимәк, аҡҡош — изге ҡош. Таңсулпан Ғарипова был юрауҙы ”Ғилмияза” драмаһында оҫта файҙалана. Артабанғы ваҡиғаларҙа ана шул аҡҡоштоң үле кәүҙәһе эйәреп йөрөгәндәй. Илдә ҙур ваҡиға булып ята. Башҡорт бейҙәре, үҙ ихтыяры менән Рәсәйгә ҡушылып, урыҫ падишаһынан грамота алып ҡайтҡан. Ана шул килешеүҙе Мәскәү кенәгәһенә теркәгәндәр. Башҡорттар араһындағы ил-йорт эштәрен башҡарыу, бейҙәргә баш булыу ҙа Бикбау бейгә йөкмәтелгән. Ана шуның хөрмәтенә Бикбау бей ҙур йыйын үткәрә. Әммә нимә эшләргә булһа ла, үҙе үлтергән аҡҡоштоң ҡаны эҙәрлекләй. Ат сабышында Иҫке бейҙең Ҡараты алдан килә. Йыраусылар бәйгеһендә лә бөрйән ырыуы ҡыҙы Ғилмияза беренселекте ала.

Үҫәргән ырыуының түрәһе Бикбау бей: ”Мин күтәрә алмаған йөк, мин эшләй алмаған эш юҡ донъяла”, — тип яҙмышҡа ҡаршы сығып өйрәнгән. Ана шул ғәҙәтен йыйында ла күрһәтә. Бына уның репликаһы:

”Б и к б а у. Вәғәҙә — иман, һылыу ҡыҙ! Йөрәгемдең көсөн күрһәтер мәл етте, ахыры! Эй, көрәшселәр! Күтәрегеҙ ҡыҙҙы! Аҡ кейеҙгә баҫтырып күрһәтегеҙ халыҡҡа еңеүсене. Иллә мәгәр (башынан бүркен йолҡоп ала) Бөрйәндең Ҡаратын үтерлек ат, Ғилмиязаны еңер йыраусы тапмаһам, исемем Бикбау булмаһын! (Бүркен ергә һуға)”.

Кәпәс ергә һуғылды. Уның менән бергә башҡорт бейенең абруйы ла халыҡ алдында юҡҡа сыҡҡандыр.

Башҡорт ырыуҙары, улай ғына ла түгел, бер ырыу эсендәге ҡан ҡәрҙәштәребеҙ араһындағы берҙәмлек тә ана шундай бейҙәрҙең тәкәбберлегенән ҡаҡшай барғандыр, күрәһең. Таңсулпан Ғарипова ”Ғилмияза” драмаһында хатта ике ырыу араһындағы тарҡаулыҡты ла, төрлө үҙ-

ара низағтарҙы ла аныҡ картиналар аша һүрәтләүгә өлгәшкән. Пьесаның стиле, поэтикаһы ана шул хаҡта һөйләй.

Сәхнә әҫәре ябай кәмит түгел. Ғибрәт һәм фәһем, йәшәү мәғәнәһе һәм зауыҡ алырҙай етди әҫәрҙәр ниңә баш ҡалабыҙҙың баш театры сәхнәһендә һирәк күренешкә әйләнеп бара? Театр тәрбиә биреү усағы түгелме ни? Ниңә сәхнә репертуарында сит ил драматургтарының әҫәрҙәренә өҫтөнлөк бирелә? Классика, тиерҙәр, бәлки. Әммә сит мөхиттең тәрбиә биреү саралары беҙҙең йәшәү рәүешебеҙгә ниндәйҙер рухи мәғәнә, тамашасыларға кешелеклелек, шәфҡәтлелек, рәхимлелек сифаттарын бирә аламы? Сит мөхиттәге йәшәү рәүеше — сит тамыр, ят бауыр. Үҙ илем — алтын бишек. Ана шул алтын бишек милли моң, милли һыҙат, халыҡсанлыҡ, милли рух, ғөрөф-ғәҙәт, рухиәт солғанышында ғына алтынлығын юғалтмаясаҡ. Башҡорт драматургияһын үҫтереүҙә яңыса моңо, үҙенсәлекле стиле булған, йәштәрҙе йәшәү мәғәнәһенә, тормош асылына өйрәтеүсе ил инәләре образдарын (Гөлзада, Бибизада, Гөлниса һәм башҡалар) сағылдырған Таңсулпан Ғарипованың пьесалары классикаға дәғүә итмәйме ни? Бик тә үҙенсәлекле хәл-ваҡиғаларға, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәтенә, тәьҫирле монолог, диалогтарға бай булған әҫәрҙәр театрҙың милли йөҙөн дә асыр ине.

Шуны ла әйтергә кәрәк: Таңсулпан көслө һәм абруйлы прозаик булған кеүек, ул — кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәт психологияһын оҫта һынландырыусы драматург та. Халыҡ тормошондағы онотолоп барған рухи ҡиммәттәребеҙҙе ҡайтанан тергеҙеүсе, үҙ уҡыусыларына, тамашасыларына рухи көс, выждан, намыҫ кеүек тәбиғи булмышыбыҙға терәк, таяныс биреүсе әҫәрҙәре менән әҙәбиәтебеҙҙе яңы бейеклеккә күтәреүсе драматург икәнен маңлай күҙе менән түгел, күңел күҙе менән күрә белеү ҙә кәрәктер.

Таңсулпан Ғарипова ижадының күкрәп сәскә атҡан сағын кисерә. Исеме халыҡ телендә, халыҡ күңелендә. Башҡорт прозаһын яңы бейеклектәргә, драматургияһын яңы үрҙәргә күтәреүсе ҙур ҡәләм оҫтаһы булыуы менән әҙәбиәтебеҙ бәхетле. Әйтәйек, ”Бөйрәкәй” тип аталған пенталогияһы донъя күргәндең икенсе йылына ҡабаттан ташҡа баҫылып сығыуы, 2004 йылдың һөҙөмтәләре буйынса уның ”Йыл әҫәре” тип иғлан ителеүе — яҙыусының ҙур ҡаҙанышы. Шулай уҡ ”Йәй ташы” драмаһы буйынса төшөрөлгән ”Сөмбөлдөң етенсе йәйе” нәфис фильмы халыҡ-ара кинофестивалдә ”Алтын фил” премияһын яулауы, сәхнә әҫәрҙәренең әленән-әле Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай һәм Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрҙарында ҡуйылыуы драматургтың ҙур уңышы.

Таңсулпан Ғарипова халҡын яратҡан кеүек, халыҡ та уны хөрмәт итә. Инде нисәнсе йыл Сибайҙа уҡыусыларҙың уның исемендәге ижад бәйгеһе үтә. Баймаҡ районының барлыҡ ауылдарында ”Таңсулпан” клубтары эшләй, китап уҡыусылар конференцияларында яҙыусы менән осрашыуҙар үткәрелә. Бындай осрашыуҙар республикабыҙҙың күпме уҡыу йорттарында, мәҙәниәт һарайҙарында, китапханаларҙа булып үтте! Сит өлкәләрҙәге ҡан ҡәрҙәштәребеҙ араһында ла күренекле яҙыусыбыҙ — һағынып көтөп алыныр ҡунаҡ. Халыҡтың зауҡы тәрән мәғәнәле ижадҡа сарсаған мәл шул.